*Приложение №2*
*к рабочей программе по литературному чтению на родном языке (башкирском), утв. пр. № 116*
*от 29.08.2022 г.*

Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
средняя общеобразовательная школа
имени Талгата Лутфулловича Рахманова с.Верхнеяркеево
муниципального района Илишевский район Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ СОШ
им.Т.Рахманова с.Верхнеяркееево

_______________ Шафикова Г.И.
№ пр.116 от «29» августа 2022 г.

**Контрольно-измерительные материалы промежуточной аттестации и критерии оценивания**

по литературному чтению на родном языке(башкирском)

| | |
|---|---|
| Уровень общего образования | начальное |
| Класс | 2 |
| Учитель | Магданова Диля Марсовна |

2022 г.

2 класс

Текст для проверки техники чтения

Ҡымыҙ

Бына йәмле йәй етте. Уҡыуҙар тамамланды. Мин ата-әсәйем менән ауылға юлландым. Каникулда өләсәйемдәрҙә тороп ҡалдым. Иртән ҡоштар һайрауына уянып киттем. Өләсәйемдең яғымлы тауышы ишетелде. Урынымды йыйыштырҙым да, аш бүлмәһенә сыҡтым. Өләсәйем миңә ҡымыҙ ҡойоп бирҙе.

Ҡымыҙ бик шифалы эсемлек. Уны бейә һөтөнән эшләйҙәр. Һауынсы бейәне йыш-йыш һауа.Һөтөн ағас көбөлә әсетә. Уны әйләнгән һайын бешә. Уны эсһәң, һыуһын ҡана, көс арта. Үпкәһе, йөрәге сирле кешегә бик фаҙалы.(69 һүҙ)

Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности). Һорауҙар:

1.Ҡымыҙ нимәнән эшләнә?

2. Ниндәй ауырыуҙарҙы дауалай?

Инша яҙырға өйрәнеү

Беҙҙең класс

Беҙҙең класта бөтәһе________уҡыусы:_________ҡыҙ,____________малай.

Класс етәксеһе_______ _________ ________.

Беҙҙең ҡыҙҙар иң _______,______________, _________, ________________. Малайҙар иң _________, _________, ____________, ____________.

Функциональ грамоталылыҡты үҫтереү өсөн эш төрө (развитие функциональной грамотности). 1-се һөйләмдә тейешле һандарҙы, 2-се һөйләмдә исемдәрҙе, 3-сө һөйләмдә исемдәрҙең билдәһен белдергән һүҙҙәрҙе яҙырға.

**Башланғыс класс уҡыусыларының туған(башҡорт) әҙәбиәте буйынса белемдәрен, белеүҙәрен (умение) һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

**I.Телдән биргән яуаптарҙы билдәләү нормалары**

- 1. Балаларҙың уҡыу һәләтлектәрен баһалау.
- Уҡыу техникаһын тикшереү.
- Ижекләп уҡыу күнекмәләрен формалаштырыу. Уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе тотош уҡыу. Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе һәм ҡыҫҡа текстарҙы аңлы уҡыу. Дөрөҫ интонация һәм пауза менән уҡыу. Ҡысҡырып уҡыу.

- Ижекләп уҡыуҙан уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе аңлы рәүештә тотош уҡыуға күсеү. Эстән уҡыу.
- Эстән уҡығанда әҫәрҙең мәғәнәһен аңлау. Уҡыуҙың төрөн билдәләү. Текстан кәрәкле информация таба белеү.
- Балаларҙың уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:
-

| Класс | Һүҙ | Билдә | Эстән уҡыу |
|---|---|---|---|
| 2 | 30 - 40 | 100 - 120 | 35 - 40 |
| 3 | 40 - 50 | 120 - 140 | 45 - 65 |
| 4 | 50-60 | 140-160 | 65-75 |

- 2. Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары.
- Яҙма эштәрҙең төрҙәре:
- 1) һүҙҙәрҙе, фразаларҙы һәм һөйләмдәрҙе күсереү;
- 2) һүҙлек диктанты;
- 3) ғәҙәти диктанттар;
- 4) һорауҙарға яуаптар яҙыу;
- Һаналған яҙма эштәрҙең башланғыс кластарҙа үткәрелә торғандары элементар характерҙа, өйрәтеү маҡсатында һәм ныҡлы әҙерлектән һуң ғына яҙҙырыла. Әҙерлек эштәре төрлөсә булырға мөмкин: һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыр алдынан бер нисә тапҡыр телдән әйттереү, ниндәй хәрефтәр яҙылыуын анализлау, ҡағиҙәләрҙе ҡабатлау һ.б.